Бөрйән районы Яңы Усман моделле ауыл китапханаһы

“Бөйөк Еңеүгә 75 йыл”

Район конкурсы

# “Бөйөк Ватан һуғышы минең ғаиләм тарихы”

Автор: Мәжитова  Айлина Ниғмәт ҡыҙы 13йәш



Исламбай ауылы иҫ киткес матур ерҙә урынлашкан. Уның тәбиғәте йәшел урмандарға, еләк- емештәргә, төрлө ҡоштарға, йәнлектәргә бик бай.

Ошо ауылда Әбделхалиҡ олатай менән Хәтирә өләсәй ғаиләһендә 1 ҡыҙ һәм 5 ул үҫә

1941 йылдың 22 июнь көнө, ил тарихында иң ҡайғылы көндәрҙең береһе. Фашист Германия илебеҙгә һуғыш башлай. 1418 көн  һәм төн дауам иткән һуғыш...





Сал картлығын һаҡлап карттарымдың,
Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,
Бөйөклөгөн һаҡлап Уралымдың,
Гузәллеген  һаҡлап Иҙелдең,
Тыуасаҡ таң, тыуасаҡ яҙ өсөн,
Яҙың япраҡлыныр гөл өсөн,
Тыуыр былам, йырланыр йыр өсөн,
Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн-
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!

М.Кәрим   1941



Һуғыш башланыу менән биш бер туған

Зиннәт

Фәтхулла

Әбдулхаҡ

Ғилмитдин

Әбделхай

Ғәлиуллиндар

Ил саҡырғас, яуға китәләр!

Ғәлиуллин Зиннәт Әбделхалик улы,
1898 йылғы, Зәки Вәлтдиҙәр менән Өфө лә  мәҙрәсәлә уҡыған һәм аҙаҡ Исламбай ауыл мәсетендә мәзин булған. Һуғышҡа тиклем колхозда эшләй .Һуғыштың тәүге көнөндәрендә һуғышҡа китә. Ҡыҙыл армеец, 1943 йылдың март айында хәбәрһеҙ  юғала .






Ғәлиуллин Фәтхулла   Ғәлиуллин Абдулхаҡ   Ғәлиуллин Абдулхай



Ғәлиуллин  Ғилмитдин Әбделхалиҡ улы.
1908 йылда тыуған.Һуғыш башланғас һуғышка китә.1942 йылда бер бик ҡаты алышта еңелергә тура килгәндә, совет һалдаттарының бер төркөмө ҡамауҙа ҡалып  пленға эләгә.Улар араһында Ғилмитдин олатайҙа була “Дахау” концентрационный лагерҙа әсирлектә булып , 1946 йылда тыуған ауылына әйләнеп ҡайтырға насип була.



Ғәлиуллин Әбдулхак Әбделхалиҡ улы.
1911 йылғы, ҡыҙыл армеец. Һуғыштан әйләнеп ҡайта алмай.1942 йылдаң
август айында хәбәрһеҙ юғала.
Һуғышҡа тиклем колхоз председателе була.



Ғәлиуллин Әбделхай Әбделхалиҡ улы, 1911 йылғы.

Бөрйән районы комсокомитетында секретарь булып эшләп йөрөгәндә,1937 йылда әрме сафтына алына. Тыуған илен һаҡлаусы олатайыбыҙ тыуған яҡтарына ҡайтып өлгөрмәй, һуғышҡа алына. Мото- Понтонно-Мостовой батальон да хеҙмәт итә. Сержант дәрәжәһендә Бөйөк Еңеүҙе ҡаршылай.1945йылда август айында Япон һуғышына эләгә.1947 йылда , 10 йыл үткәс “Германияны еңгән өсөн ” ,“Японияны еңгән өсөн ” миҙалдарын тағып әйләнеп ҡайта.



Наградной лист

1. Фамилия, имя и отчество Галидемин Абдулхай Халикович
2. Звание Ст. Сержант Должность, часть Ком-р Отд. 3-го О.М.П.Б.
3. Представляется к награде медалью "За боевые заслуги"
4. Год рождения 1918 г. 5. Национальность Башкир
6. Партийность Член ВКП(б)
7. Участие в гражданской войне, последующих боевых действиях по защите СССР и Отечественной войне Не участвовал
С 9.08.45 г. в боях с японскими захватчиками.
8. Имеет ли ранения и контузии в Отечественной войне Не имеет
9. С какого времени в РККА с 1938 года
10. Каким РВК призван Белорецким РВК
11. Чем ранее награжден Не награжден
12. Постоянный домашний адрес представляемого к награждению и адрес его семьи

Краткое конкретное изложение личного боевого подвига или заслуг

На территории занятой противником в ночных условиях организовал ремонт и восстановление колонного пути, чем способствовал бесперебойному продвижению своих войск. Выполнение боевого задания производилось в ночь с 12 на 13.08.1945 г. в районе совхоза Дальфис р. Сунгач.
Делу партии Ленина-Сталина предан.
Представляется к награде медалью "За боевые заслуги".

Командир

Карт олатайдың үҙ ҡулына ала алмаған “За отвагу” миҙалы мәғлүмәттен интернет селтәренән белдек

Страница: 2 из 149

## Медаль «За отвагу»




### Приказ подразделения

**№:** 2/н **от:** 31.08.1945

**Издан:** 11 пмбр

**Архив:** ЦАМО

**Фонд:** 33

**Опись:** 686196

**Ед.хранения:** 6423

**№ записи:** 29238689

- 2-

2

| | |
|---|---|
| 12. Лейтенанта Розенфельд Абрама Моисеевича | Командира взвода 16 отд. мото-понтонного мостового батальона. |
| 13. Сержанта Свирипейко Ивана Яковлевича | Автомеханика 31 отдельного мото-понтонного мостового батальона. |
| 14. Лейтенанта Смоленцева Константина Ивановича | Командира роты 16 отдельного мото-понтонного мостового батальона. |
| 15. Младшего лейтенанта Смоляткина Валентина Яковлевича | Командира взвода 654 отдельного батальона автомобилей амфибий. |

Медалью "ЗА ОТВАГУ"

| | |
|---|---|
| 1. Младшего лейтенанта Арсибекова Василия Федоровича | Командира взвода 16 отдельного мото-понтонного мостового батальона. |
| 2. Старшего сержанта Гильтиханова Абдулхая Ханиковича | Командира отделения 8 отдельного мото-понтонного мостового батальона. |
| 3. Сержанта Дворяшина Ивана Дмитриевича | Командира отделения связи 16 отдельного мото-понтонного батальона. |
| 4. Красноармейца Китайцева Федора Семеновича | Шофера 654 отдельного батальона автомобилей амфибий. |

Һуғыштар булмай ҡорбанһыҙ.
Унһыҙ-юҡ Еңеү туйы.
Ә беҙ үлгәндәр алдында
Бурыслы ғүмер буйы.

Зиннәт, Фәтхулла, Әбдулхаҡ олатайҙарыбыҙ,
ил азатлығы өсөн һәләк булғандар.





Ғилмитдин олатай һуғыштан ҡайткас 3 йыл ферма мөдире, 7 йыл райпола һатыусы һәм урмансы булып эшләй.

Ул халыҡ күңелдә һунарсы ,ҡортсо булып иҫтә ҡала. 1978- се йылда яҡты донъя менән хушлаша.



Олатайым Әбделхай 1947 йылдарҙан һуң Бөрйән Райзоһы етәксеһе булып эшләй.”Буденный” колхозына председатель итеп ебәрелә. Колхоз алдынғылыҡа сыҡҡас, уны “Урал” кохозын күтәреү өсөн , председатель итеп Әбделмәмбәт ауылына эшкә ебәрәләр.

1957 йылда вафат була. Яҙмыш ҡушыуы буйынса мәңгелек йортола Әбделмәмбәт зыяратында.





Ғилмитдин олатайҙың “Кипит- дует” тигән ҡушаматын Бөрйән халҡы әле лә иҫләй.




Ҡарт олатайым Әбделхай 1953 йылда Ғәлиәкбәр ауылына Нәғимә апайына ҡунаҡҡа барған сағында, үҙ исемен яҙып таш ултырта. Ул таш иҫтәлек булып әлеге ваҡытта ла һаҡлана.

# Алыҫ йылдар иҫтәлеге

Аҫҡар ауылында минең өҫ туған Ишмурзина Рабиға апайым йәшәй. Беҙ уның менән һағынышып осрашып торабыҙ, һөйләшеп һүҙҙәребеҙ бөтмәй. Рабиға апай минең тәүге уҡытыусым да. Осрашҡанда фотоальбомда ҡарап, туғандарҙы иҫкә алабыҙ, хәтирәләргә төшөп китәбеҙ. Ул 1937 йылда төшөрөлгән бер фотоны айырыуса һаҡлап, ҡәҙерләп тота. Ул фото - һеҙҙең алда. Беренсе рәттән тәүгеһе, эшләпә кейгәне - Ғәлиуллин Фәтхулла Әбделхалиҡ улы. Уның һатыусы булып эшләгән мәле. Икенсеһе - Исламбай ауылынан колхоз рәйесе Ғәлиуллин Әбделхаҡ Әбделхалиҡ улы, өсөнсөһө - Ғәлиуллин Әбделхай Әбделхалиҡ улы. Фотоға төшкән мәлдә ул район үҙәгендә комсомол секретары булып эшләгән, колхозға йәштәрҙе комсомолға алырға килгән ваҡытта эләккән был фотоға. Арттан беренсе - Кульчиков Кинйәбулат Шәхнияз улы. Ул һуғышҡа киткәнгә тиклем Бикташ ауылында



бригадир булып эшләгән. Артабан - Ишмурзин Мөҙәрис Мөхәмәҙиә улы. Колхозда бухгалтер булып йөрөгән сағы. Ул мәлдә Исламбай, Ҡыҫыҡ, Бикташ ауылдары бер колхоз булған.

Фәтхулла бабай 1901 йылғы, ҡыҙыл армеец, 1943 йылда һуғышта хәбәрһеҙ юғалған. Әбделхаҡ ағай 1911 йылғы, шулай уҡ ҡыҙыл армеец, 1942 йылдың август айында һуғышта хәбәрһеҙ юғалған. Әбделхай 1918 йылғы. Ул Исламбай ауылында тыуған. Һуғыштан 1946 йылдың март айында әйләнеп ҡайтты. Кинйәбулат 1909 йылда тыуған, 1943 йылдың март айында хәбәрһеҙ юғалған. Ишмурзин Мөҙәрис еҙнәй 1909 йылғы, Исламбай ауылыныҡы. Һуғыштан 1948 йылда ғына ҡайтты. Рабиға апай менән Мөҙәрис еҙнәй 3 бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Балалары барыһы ла үҙҙәре һымаҡ эшһөйәрҙәр. Ҡыҙҙары Флүрә Аҫҡар мәктәбендә уҡытыусы булып эшләне. Фажиғәле үлем уны беҙҙең аранан алып китте. Фәрзәнә Белорет ҡалаһында фельдшер. Улдары Марс колхоз мәлендә яғыулыҡ ташыу машинаһында эшләне, әле лә тик ятмай.

Рабиға апайым хәҙер туғыҙынсы тиҫтәне ҡыуа инде. Уға һаулыҡ, шатлыҡтар теләйем.

Ә был фотоны уларҙы белгән ҡайһы бер оло быуын кешеләре иҫтәренә төшөрөп, хәтирәләргә бирелеп алһын тип тәҡдим итәм. Ил яҙмышын иңдәренә күтәреп, беҙҙең бөгөнгө матур тормош өсөн бәғзеләре ғүмерҙәре менән түләгән бит.

**Кәбирә ӘБДРӘХИМОВА.**

Иҫке Собханғол ауылы.

1.09.2005.



Зиннәт олатайҙың 4 улы һәм 4 ҡыҙы була. Улы Рамаҙанда Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша . Фәтхулла олатайҙын 5 ҡыҙы һәм 1 улы ҡала. Ғилмитдин олатайҙың 3 улы һәм 4 ҡыҙы. Әбделхаҡ олатайҙын 2 улы, Әбделхай олатайҙың 3 улы һәм 2 ҡыҙы нәҫелде дауам итәләр.



Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!

MyShared